


# Тема:
# ***«Өлкән һәм әҙерлек төркөмөндә «С” өнөн әйтеүҙе камиллаштырыу»***

# Маҡсат:

- - балаларҙы ижектәрҙә, һүҙҙәрҙә, фразалы телмәрҙә ***с*** өнөн таҙа, дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;
- -өнгә характеристика биреү;
- - һүҙгә өн-ижек  анализы яһау һәләтен үҫтереү;
- - һүҙҙә ***с*** өнөнөң урынын табыу буйынса күнекмәләр үткәреү;
- - балаларҙың хәтерен, иғтибарын, фекерләүен үҫтереү;

# Йыһазландырыу:

- Ҡоштар (ҡарабаш турғай, һандуғас, ҡарлуғас, күгәрсен, турғай, ҡарсыға, аҡсарлаҡ, сыйырсыҡ), ағас, бесәй, себеш, сәғәт, әтәс, саған  һүрәттәре, схема төҙөү өсөн йыйылмалар.

# Ваҡ һәм дөйөм моториканы үҫтереү өсөн күнегеүҙәр

**Бына тора өй,**
**Ишегендә йоҙаҡ.**
**Кем уны аса алыр икән?**
**Бороп ҡарайбыҙ,**
**Һуғып ҡарайбыҙ,**
**Тартып ҡарайбыҙ – асылды.**

*Ҡулдар менән өй ҡыйығын күрһәтеү*
*бармаҡтарҙан йоҙаҡ эшләргә, әйләндерергә*
*устар менән һуғып ҡарарға*
*төрлө яҡҡа тартырға*
*һәм ҡулдарҙы айырырға.*

# Дәрес барышы:

## *1. Тема менән таныштырыу*
## *а) йомаҡтар сисеү*

- Ҡарап торһаң – йәне юҡ,
- Тупраҡ ашай, һыу эсә,
- Үҙе юғары үҫә. ***(Ағас)*.**

- *Килеп сыккан яуаптарҙы дөрөҫ итеп кабатлау, “**С**” өнөн айырыу, өндөң урынын билдәләү*



Тарағы бар – сәсен тарамай,
Урағы бар – иген ура алмай ***(Әтәс)***.



*Килеп сыккан яуаптарҙы дөрөҫ итеп кабатлау, “**С**” өнөн айырыу, өндөң урынын билдәләү*

Көн үткәнде кем белә,

Мин онотһам, ул белә

***(Сәғәт).***

*Килеп сыккан яуаптарҙы дөрөҫ итеп кабатлау, “**С**” өнөн айырыу, өндөң урынын билдәләү*



Үҙе мейес башында,
Үҙе тун ябынып йоклай
***(Бесәй)***



*Килеп сыккан яуаптарҙы дөрөҫ итеп кабатлау, “**С**” өнөн айырыу, өндөң урынын билдәләү*

Ҡыҙғылт һары
япраҡтарын
Ергә ҡоя аҡ саған,
Ҡаҙҙ ҡыҙыл тәпәйенә
Улар бигерәк оҡшаған
***(Саған).***



*Килеп сыккан яуаптарҙы дөрөҫ итеп кабатлау, “**С**” өнөн айырыу, өндөң урынын билдәләү*

# 2. Ижектәрҙе ҡыҫҡырып әйтеү

**СА – СО – СУ – СЫ**

**АС – ОС –УС – ЫС**

**СӘ – СӨ- СҮ – СИ**

**ӘС – ӨС – ҮС – ИС**

*С өнө ҡайһы ижектә ҡаты ишетелә?*

*Ә ҡайһы ижектә йомшаҡ ишетелә?*

# “Өндө тот” уйыны:

һүҙҙе әйткән саҡта С өнөн табыу һәм айырыу

Сәс



Баҫыу



Кәзә



Бысаҡ



Ҡалас




Ҡайыш



# Исемендә С өнө булған ҡоштарҙы табыу



Ҡарабаш турғай



Күгәрсен

# Исемендә С өнө булған ҡоштарҙы табыу



Турғай



Ҡарсыға

# Исемендә С өнө булған ҡоштарҙы табыу



һандуғас



Ҡарлуғас

# Исемендә С өнө булған ҡоштарҙы табыу





**Сыйырсыҡ**

**Аҡсарлаҡ**

# Тотош һүҙҙәрҙе дөрөҫ һәм асыҡ итеп әйтергә өйрәтеү өсөн күнекмә

Әсәһе менән бергә
Себешкәйҙәр йүгерә:
“Зилә, беҙгә емдәр һип,
Сип-сип-сип,
һип-һип-һип!”



# *СӘЙ* һүҙенә өн-ижек анализы. Һүҙҙең схемаһын төҙөү





# АФАРИН!



# Ҡулланылған әҙәбиәт:

1. «Башҡортостан уҡытыусыһы»журналы.
2. Ғәлиева Ғ.Ғ., Нафиҡова З.Ғ. Башҡорт балалар баҡсаһы өсөн уҡытыу-тәрбиә программаһы. Өфө, 1999.
3. Ә.М. Хәйбуллина. Мәктәпкәсә йәштәге балалар менән логопедия дәрестәрен үткәреү өсөн методик күрһәтмәләр. Өфө, 2002.
4. https://vk.com/bashkort_balahy_min
“Башҡорт балаһы мин” төркөмө

Әҙерләне:

*Сибай ҡалаһы ҡала округы*
*муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы*
*«Бала үҫтереү үҙәге «Ҡурай» балалар баҡсаһының*
*уҡытыусы-логопеды*

***Хурамшина Гөлирә Нурмөхәмәт ҡыҙы***

*Сибай, июнь 2020 й.*